# Гендер тәрбиәһе

**Гендер (ингл. gender, лат. genus “зат, енес” ) –** йәмғиәттә кеше тәртибен бидәләүсе социаль зат (ир йәки ҡатын-ҡыҙ заты). Йәғни гендер ир менән ҡатын араһындағы ниндәйҙер бер тәртибе, йәшәү рәүеше, статусы, психологияһы һ .б айырмаһы менән билдәләнә.

Гендер — это социальный пол человека (мужской или женский). Он характеризуется не только биологическими признаками, но и определённым поведением, манерами одеваться, образом жизни, статусом, психологией и другими отличиями, существующими между мужчиной и женщиной. Ир менән ҡатын – ул ғаилә, бәләкәй генә дәүләт, йәмғиәт.

Ниндәй ғаиләләр була?

1. Ғаилә була – патриархат. Бында кем хужалыҡ итә? Ир кеше аҡса эшләй, ул яуаплы, бөтә нәмәне контролдә тота. Бында ҡатын менән балалар яфа сигәләр.
2. Тағы ла матриархат ғаиләләр була. Был йәмғиәттә ҡатын –ҡыҙ ғаилә башлығы, ир кеше – рабочая лошадка, уның һүҙе һүҙ түгел.
3. Эгалитар ғаилә. Заманса ғаилә (современная). Был ғаиләләрҙә социаль тигеҙлек хөкүм һөрә. Ирҙә, ҡатында эшләй, өй мәшәҡәттәрен бергә башҡаралар, ирҙең эше, ҡатындың эшенә бүленмәй, бөтә нәмә бер тигеҙ.

Мәктәпкәсә йәштәге балаларҙа гендер мәҙәниәте формалаша. Һәм беҙҙең бурысыбыҙ балаларҙа эгалитар мәҙәниәте нигеҙҙәрен формалаштырыу.

Һеҙ белеүегеҙсә, бала билдәле бер зат (биологический) булып тыуа, ә гендер тәрбиәһен икенсе кешеләр менән аралашҡан ваҡытта ала. Психологтар раҫлауынса бала 3 йәштә ҡыҙ йәки малай икәнлеген аңлай башлай, ә 4 йәштән 7 йәшкә тиклем улар: ҡыҙҙар – буласаҡ ҡатын икәненә, малайҙар – буласаҡ ир икәненә төшөнә, аңлай башлайҙар (гендерное самосознание, гендерная устойчивость формалаша). 3 йәштә “Психологик мин!” барлыҡҡа килә. Фәҡәт ошо йәштә балаларҙа үҙҙәренең органдары менән ҡыҙыҡһыныуы башлана. Ҡыҙҙарҙыҡы бер төрлө, малайҙарҙың икенсе төрлө икәнлеген асыҡлайҙар. Әлбиттә, хәҙерге заманда быны күрһәткән бөтә

уйынсыҡтарҙа бар: ҡатын эсендә ятҡан ҡурсаҡтар, ирле - ҡатынлы ҡурсаҡтар һ.б. Мәктәпкәсә йәштәге балаға аңлауы ауыр: нисек булырға тейеш ул ысын ир, йәки ысын ҡатын.

Хәҙерге заманда балалар баҡсаһында һәм ғаиләлә гендер темаһы бик актуаль тора. Бөгөнгө көндә балаларҙың гендер буйынса үҙаңын үҫтереүгә, бер нисә кире сәбәп тора. Беренсенән, бөгөнгө йәмғиәттәге социаль үҙгәрештәр:

- Йәмғиәттә айырылышыуҙарҙың күплеге;
- Тулы булмаған ғаиләләрҙең артыуы; Бөгөнгө көндә тулы булмаған ғаиләләр байтаҡ ҡына, шуның өсөн бала атай менән әсәйҙең үҙ – ара бәйләнешен, мөнәсәбәтен күреү мөмкинселегенән мәхрүм. Бала көндәлек тормоштағы йөкләмәләрҙе күрә, белә алмай. Ир бала өлгөнө – атаһынан, ә ҡыҙ бала әсәһенән ала һәм киләсәктә уны үҙ ғаиләһендә ҡуллана. Бынан тыш ул ата-әсәһенең үҙ-ара мөнәсәбәтен күреп үҫә һәм тормош көтөү моделен күңеленә һеңдерә бара. Элекке заманға әйләнеп ҡайтҡанда ла бит ҡыҙҙар һәр ваҡыт әсәй янында, малайҙар атай янында күберәк булғандар. Бишек йырҙарын йырлағанда ла бәпәй өсөн түгел, ә айырым малайҙар өсөн, айырым ҡыҙҙар өсөн генә йырланған. Кесе йәштән үк ирҙәр, ҡатындар характерындағы тәртип формалашҡан. Тағы ла сәбәптәрҙең береһе булып
- Әсәй кешенең ғаилә башлығы ролен алыуы. Һеҙ белеүегеҙсә хәҙерге заманда тәрбиә эшендә әсәйҙәр күберәк ҡатнаша. Ҡыҙҙарҙы ла, малайҙарҙы ла әсәйҙәр тәрбиәләй: өйҙә – йә әсәй, йә өләсәй, балалар баҡсаһында – тәрбиәсе – ҡатын ҡыҙҙар.
- Атайҙарҙың тәрбиә эшендә пассив булыуҙары; Малай өсөн атай тәрбиәһе мөһим. Ҡыҙ өсөн әсәй тәрбиәһе кәрәк. Атай кеше малайына ҙур иғтибарын бүлергә тейеш. Ҡыҙ балалар әсәй эргәһендә аш-һыу әҙерләгәндә, ҡул эштәре менән шөғөлләнгәндә яндарынан китмәй, үҙенсә ярҙам күрһәтеп маташалар.
- Ата-әсәләрҙең бала тәрбиәләүҙә гендер тәрбиәһе буйынса белемдәренең етешмәүе.

- Малай һәм ҡыҙҙар араһындағы аралашыу мәҙәниәте;
- Мәктәптәрҙә ир уҡытыусыларҙың аҙ булыуы;
- Предметлы үҫтереүсе үҫеш мөхитендә ҡыҙҙар өсөн уйын материалдарының күплеге;
- Белем тәрбиә биреү процесын гендер тәрбиәһен иҫәпкә алып ойоштормау һ.б.
- Күп кенә ҡатын – ҡыҙҙарҙың тәмәке тартыуы;
- Ғаиләләрҙә күпселек осраҡта атай кешенең эскелеге.
- Ир менән ҡатын профессияларының буталып бөтөүе;

Бына ошо һәм башҡа сәбәптәр бөгөнгө көндә социаль үҙгәрештәргә алып килә. Ҡыҙҙар малайҙарға, малайҙар ҡыҙҙарға оҡшарға тырышалар (маскулинизация девочек, феминизация мальчиков). Икенсе төрлө әйткәндә гендер тәрбиәһе – ул балала ысын ҡатын һәм ирҙәр тураһында күҙаллауҙарын формалаштырыу. Мәктәпкәсә йәштәге балаларҙа алдынғы тәрбиәгә эйә булған, мәҙәниәтле балалар тәрбиәләү мөһим <u>(воспитывать общекультурные навыки).</u> Баланы ысын шәхес итеп социалләштереүҙә был бик мөһим. Бөгөнгө көндә заман тиҙ темпта үҙгәрә, алға бара, шуның менән бергә мәҙәниәттә үҙгәрә. Элекке заманда “Малайҙар ишек асып индерергә тейеш” - тигән инек, ә хәҙер күп ерҙәрҙә ишектәр үҙе асыла. Шуның өсөн бөгөнгө көндә иң актуаль булған культураны тәрбиәләү бурысы ҡуйырға кәрәк. (нужно взять самую актуальную культуру на сегодняшний день). Һәр мәҡәлдә, һәр әйтемдә эгалитар мәҙәниәте һүрәтләнмәй.

Беҙ һәр ваҡыт 12 апрелгә Юрий Гагариндың фотоһын ҡуйырға күнеккәнбеҙ, ә Валентина Терешкованы онотабыҙ бит инде. 9 майҙа гел атай-олатайҙарҙы һөйләйбеҙ. Ә атай-олатайҙар менән берлектә өләсәйҙәрҙә һуғышҡан бит. Ҡатын ҡыҙҙар һәр ваҡытта ла атта ла ярышалар, һунарға ла йөрөйҙәр һ.б. Күп ҡатын –ҡыҙҙар политика өлкәһендә лә эшләйҙәр.

Әлбиттә, ҡыҙҙарҙың да, малайҙарҙың да социаллəшеүе бер үк түгел. (Социализация у мальчиков и девочек не бывает одинаково). Беҙ һәр ваҡыт әйтәбеҙ “Ҡыҙ кеше матур булырға тейеш”, “Һин егет кеше”. Ҡайһы саҡта

“Һин мужик түгел!” тип тә әйтеп ебәрәбеҙ бит инде. Һәм балала шундай образ барлыҡҡа килә.

Әгәр мәктәпкәсә йәштәге балаларҙа малайҙар менән ҡыҙҙарҙың үҙ ара мөнәсәбәтенең дөрөҫ формалашыуына, бер-береһен аңлап эш итеүҙәренә, ҡыҙҙарҙа – йомшаҡлыҡ, яғымлылыҡ, бөхтәлек, матурлыҡҡа ынтылыш, ә малайҙарҙа - ҡыйыулыҡ, түҙемлелек, сыҙамлылыҡ,тәүәкәллек, батырлыҡ, ҡыҙҙарға ҡарата яғымлы сифаттарын тәрбиәләмәһәк, был балалар ҙурайғас үҙҙәренең ғаиләлә социаль ролдәрен насар үтәйәсәктәр. Бөгөнгө көндә балалар – коммуникабель, еңел аралашыусан, белемле булһындар тигән талап ҡуйыла. Тағы ла уның квартираһы, машинаһы булһын тигән талап та ҡуялар. Элек икенсе идеал булды – кейәүгә сыҡһа булған, йәки килен алһа ҡайҙа йәшәһә лә йәшәр әле.

Бөгөнгө көндә стандарт талаптары ла быны инҡар итә. Һәм биш өлкәнең “Социаль – коммуникатив үҫеше”ндә гендер тәрбиәһе - төп йүнәлештәрҙең береһе булып тора. Иң төп шарттарҙың береһе булып – предметлы үҫтереүсе үҫеш мөхитен байытыу. Стандарт талаптарына ярашлы үҫеш мөхите нисек булырға тейеш (йөкмәткеһе яғынан бай, трансформируемый, вариатив, аңлайышлы, хәүефһеҙ).

Белем биреү процесында гендер тәрбиәһе түбәндәге ойоштороу эшмәкәрлектәрендә тәҡдим ителә:

- ***Балаларҙы ҡабул итеүҙе ойоштороуҙа;*** 90 % педагогтар иҫәпләүенсә ҡыҙҙар балалар баҡсаһы шарттарына еңел яраҡлаша, 35 % - әгәр баланы балалар баҡсаһына әсәй кеше түгел , ә атай алып килһә бала тиҙерәк адаптацияны еңел үтә тип иҫәпләй.
- ***Ашауҙы ойоштарғанда гендер тәрбиәһенең ҡарашы (уңайлы булыуы).*** Ашамаған балаларға ошолайтып әйтһәгеҙ, уларҙың аппетиттары күтәрелеп китә
  - Күҙҙәрегеҙ йызлап ялтырап, йылтырап китте;
  - Тырнаҡтарығыҙ матур үҫә, буй – һынығыҙ матурая;
  - Принцесса кеүек булаһығыҙ инде;
  - Сикәләрегеҙ янып китте, алһыу ғына төҫкә инде һ.б.

Ысынында малайҙар шәп, ҡабаланып  ашайҙар бит инде. Шуның ҡөсөн уларға ҡаршы тороу принцибына таянып эш итеү мөһим:

- Әйҙәгеҙ, ҡыҙҙар өлгө күрһәтегеҙ әле нисек ҡалаҡты дөрөҫ тотоп ашайҙар? "Ҡыҙҙар арҡаларығыҙҙы дөрөҫ тотоғоҙ әле, һеҙ бит буласаҡ  дамалар йәки ханымдар!", "Кемдең өҫтәле иң таҙаһы?" һ.б.

Әгәр бындай сағыштырыуҙар мөнәсәбәттәрҙе асыҡлауға кире һөҙөмтә килтерә икән, тимәк коллективта ҡулланырға ярамай.

- Гигиеник ҡағиҙәләрҙе үтәгәндә лә гендер тәрбиәһе ҡулланыла. Өлкән төркөмдәрҙә туалет бүлмәһенең ишегенә шартлы билдәләр  элеү: хәҙерге ваҡытта малайҙар йәки ҡыҙҙар инә.
- ***Йоҡо ваҡытын ойошторғанда гендер тәрбиәһе:***
  - Түшәк кәрәк яраҡтарын маркировкалау. Бында инде койкаларҙы маркировкалау дөрөҫ булыр ине. Ҡыҙҙарҙыҡын – бантиктәр, принцессалар итеп, ә малайҙарға машиналар ҡуйып һ.б.
  - Шуны иҫтән сығарырға ярамай: малайҙар күберәк тирләйҙәр, шуға уларға еңел кейем кейҙереп йоҡлатыу мөһим. Йоҡлап китеү өсөн уларға оҙаҡ ваҡыт сарыф ителәә (15-20 минут). Әммә ҡыҙҙарға үҙҙәрен тәртипкә килтерер өсөн күп ваҡыт сарыф ителәә (сәс үреү, бантиктәр ҡуйыу), шуның өсөн уларҙы саҡ ҡына  иртәрәк торғоҙа башлаһаңда була.
- Сисенеү бүлмәһендә шкафтарға: ҡыҙҙар өсөн- ҡурсаҡтар, сәскәләр һ.б., ә малайҙар өсөн – машина, самолеттар һ.б.
- Ҡулдарҙы һөртөү өсөн таҫтамалдарҙың төрлө төҫтә булыуы;
- Физкультура  кейеме  малайҙар һәм ҡыҙҙар өсөн айырым булыуы мөмкин;

Иң төп шарттарҙың береһе булып – үҫеш мөхитен булдырыу тора тип әйтеп үткәйнем.

Үҫеш мөхитен ойоштороуҙа ***иң төп йүнәлештәрҙең*** береһе булып ***төркөмдә малайҙар һәм ҡыҙҙарҙың һанын иҫәпкә алыу*** тора. Әгәр төркөмдә

25 % ҡыҙҙар тәшкил итеп, 75 % малайҙар икән, малайҙар өсөн сюжетлы-ролле уйындар күберәк пространствоны тәшкил итеүе мотлаҡ.

Икенсе төп йүнәлештәрҙең береһе булып ***гендерная идентичность үҫеше этаптарын иҫәпкә алыу***. Төркөмдә зоналарҙы малайҙарҙыҡына һәм ҡыҙҙарҙыҡына бүлеү, уларҙы бергә уйнамайһығыҙ тигән һүҙ түгел. Әгәр малайҙар ҡыҙҙар бергә уйнайҙар икән – был бик яҡшы. Тәрбиәселәрҙең ауыҙынан йыш ҡына ишетергә тура килә “Нимә ҡыҙҙар араһында йөрөйһөң, бар малайҙар менән уйна” тигән һүҙҙәрен. Был инде режим ваҡытында, уйынаған ваҡытта күҙәтелә. Ә киреһенсә малайҙар һәм ҡыҙҙарҙың бер-береһе менән үҙ ара килешеп уйнауҙарын, үҙ ара мөнәсәбәттәрен ҡороуға өйрәнеүҙәрен ойоштороуға тырышырға кәрәк. Мәҫәлән, “Ғаилә” уйынында малай атай ролен үҙләштерһә, ҡыҙ әсәй йәки ҡыҙ бәпәй ролен уйнай. Был мөйөштә малайҙар өсөн инструменттар булыу бик яҡшы, малайҙар зонаһында доктор сумаҙаны булыу отошло, сөнки ҡыҙҙар малайҙарға медицина ярҙамы күрһәтәләр. Сюжетлы – ролле уйындаар аша малайҙар һәм ҡыҙҙар үҙ ара аралашып реаль тормошто сағылдыралар. Бәлки ошо ҡыҙҙар араһында футболист, хоккеистар барҙыр. Хәҙерге заманда хоккей буйынса ҡатын-ҡыҙҙар командаһы бар. Израилдә ҡатын – ҡыҙҙар самолет йөрөтәләр. Бөгөнгө көндә ҡыҙҙар ни өсөн машина уйнайҙар? Сөнки һәр ике ҡатын машина йөрөтә. Сит илдәрҙә гендер хоҡуҡтарын ҡыҫыу, сикләү буйынса статья бар (за гендерную дискриминацию). Уларҙа бөтәһе лә бер тигеҙ. Шуның өсөн безгә педагогтарға балаларҙа ир дәрәжәһен һәм ҡатын-ҡыҙ дәрәжәһен формалаштырыу мөһим.

Өсөнсө төп йүнәлештәрҙең береһе булып малайҙар һәм ҡыҙҙарҙың ***психологик үҙенсәлектәре үҫешен иҫәпкә алыу***: Ҡыҙҙар өсөн ҙур пространство кәрәкмәй, төркөмдә улар бер мөйөштә генә уйнарға мөмкиндәр. Мәҫәлән, ҡурсаҡ менән уйнаһалар оҙаҡ итеп бер урында ғына уйнайҙар. Ә малайҙар икенсе төрлө уйнайҙар: уларҙың уйындары гел актив рәүештә була, бер-береһенең артынан йүгерәләр, төрлө объекттарҙы тикшеренеүгә һ.б. һәм бөтә пространствоны ҡулланалар. Шуның өсөндә малайҙарға күберәк пространство талап ителә.Күберәк осраҡта малайҙар алыштырыусы предметтар менән уйнарға яраталар, һәр бер деталенә иғтибар

иәләр. Шуның өсөн малайҙарға малайҙар өсөн төрлө конструкторҙар, трансформерҙар, төҙөлөш блоктары, инструменттар, йыйылып ҡорола торған машиналар һ.б. алыу отошло. Ә ҡыҙҙар киреһенсә уйынсыҡтың нисек төҙөлөүе тураһын әҙ ҡыҙыҡһыналар. Төркөмдәрҙә уйындар өсөн материалдар һәм предметтар реаль тормошто сағылдырған булыуы бик мөһим (өйҙөкәнә оҡшарға тейеш).

***Үҫеш мөхитен булдырыуҙа төп критерийҙар:***

- Байыҡтырыу (үҫтереү, арттырыу );
- Функциональ;
- Мөхиттең маҡсатҡа ярашлы булыуы;

Байыҡтырыу (үҫтереү, арттырыу) :

- Төрлө зоналарҙың булыуы;
- Төрлө эшмәкәрлек төрҙәренә предметтарҙың, атрибуттарҙың етерлек кимәлдә булыуы;
- Бөтә кешелек өсөн ҡиммәттәрен үҫтереүгә стимул булып торған предметтарҙың барлығы;
- Сюжетлы-ролле, театр, аралашыу компоненттарын тормошҡа ашырыу өсөн атрибуттарҙың, дидактик уйындарҙың барлығы;
- Аралашыу өсөн нәфис әҙәбиәт, һүрәтләү, музыкаль саралар, аудио, видео ҡулланмаларҙың барлығы;

Функциональ:

- Атрибуттарҙы бөтө төр эшмәкәрлектәрҙә лә ҡулланыу мөмкинселеге;
- Полифункциональность;

Мөхиттең хәрәкәтсәнлеге (үҙгәреп тороусанлығы); Йәмғиәт шул тиклем тиҙ темпта үҙгәрә, ә төркөмдәрҙә предметлы-үҫеш мөхите, социаль һәм методик мөхиттәр яй темпта үҙгәрә, йә бөтөнләй үҙгәрмәй нисә йыл шул килеш тора: малайҙар һәм ҡыҙҙар өсөн сюжетлы ролле уйындарҙың атрибуттары, бик күп зоналар урын еренә еткерелеп эшләнелмәгән һ.б. Фәҡәт ошо мөхиттә бала эшмәкәрлеге һәм уның икенсе балалар менән аралашыуы, нимәнелер үҙенә ҡабул итеүе һәм нығытыуы, шулай уҡ гендер тәрбиәһенә ҡағылған яңы ысулдарын формалаштыра.

- Балаға һәр предмет аңлайышлы;
- Мөхитте үҙгәртеүгә балаға мөмкинселек биреү;

<u>Мөхиттең маҡсатҡа ярашлы булыуы</u>:

- Төркөмдә гендер буйынса пространствоны иҫәпкә алыу;
- Гендерная идентичность үҫеше этаптарын иҫәпкә алыу;
- Малайҙар һәм ҡыҙҙарҙың психологик үҙенсәлектәре үҫешен иҫәпкә алыу;
- Гендер айырмаһы буйынса маркер ҡулланыу;

Мәктәпкәсә йәштәге балаларҙа гендер тәрбиәһен биреүҙә личностно-ориентированная технологияһы алға сыға:

1. Сара (средствоа) – уйындар, халыҡ әкиәттәре, мәҡәлдәр, бишек йырҙары һ.б.
2. Алымдар (методы) – уйын, әңгәмә, проблемалы ситуациялар, схемалар, һ.б.
3. Ысулдары (форма) – уйын эшмәкәрлеге, эҙләнеү – тикшеренеү, проблемалы ситуация, баланың ҡыҙыҡһыныуы, өлкәндәр менән аралашыу, уйын атрибуттарының сағыу булыуы,

Ир менә ҡатындың нисек булырға тейешлеге икәнлеген күҙаллауҙарын формалаштырыу бик мөһим, әммә ләкин бының менә сикләнергә ярамай. Ошо күҙаллауҙарҙы тормошҡа ашырыға ярҙам итергә кәрәк. Бының өсөн баланың тормош тәжрибәһенә яҡын ситуацияларҙы иғтибарға алыу мөһим. Бала тәрбиәләүҙә өлкәндәрҙең тәртибе лә миҫал була ала. Малай һәм ҡыҙ – ул ике төрлө донъя. Әгәр педагог һәм ата-әсәләр гендер тәрбиәһен иҫәпкә алып тәрбиәләһә был мәсьәләне уңышлы сисә алырҙар.

Механизмом гендерного воспитания детей дошкольного возраста выступают личностно-ориентированные технологии:

1. Средства
2. Методы
3. Формы

**<u>Средства</u>**

- игры
- народные сказки

- пословицы
- колыбельные песни

**Методы:**

- игры
- познавательно-развивающие этические беседы
- проблемные ситуации
- схемы-действия

**Форма**

- игровая деятельность
- экспериментальная
- проблемно - поисковая

Для того, чтобы предоставить равные возможности в обучении существует:

**3 типа мотивации**

- игровая (стимулирует детей, если в содержание включены способы построения)
- личная заинтересованность детей к деятельности (предлагая сделать что-то в подарок или для игры)
- общение детей со взрослыми (будет стимулировать детей в том, случае, если воспитатель сумеет убедить девочку или мальчика, что без их помощи ей не обойтись).

При проведении работы по воспитанию детей с учётом их гендерных особенностей, предлагаем обратить внимание на следующее:

- На привлекательность игрового материала и ролевой атрибутики с целью привлечения детей к отражению в игре социально одобряемых образов женского и мужского поведения;
- На достаточность и полноту материала для игр, в процессе которой девочки воспроизводят модель социального поведения женщины – матери;
- На наличие атрибутики и маркеров игрового пространства для игр – «путешествий» в которых для мальчиков представляется возможность проиграть мужскую модель поведения.

Сформировать представления, какими должны быть мужчины и женщины, очень важно, но ограничиваться этим нельзя. Надо помочь ребенку реализовать эти представления. Для этого, прежде всего, используются естественные и создаются проблемные ситуации, близкие жизненному опыту детей. Немалую роль играет и личный пример поведения взрослого, который воспитывает ребенка.

Мальчик и девочка – два разных мира. Если воспитатели и родители заинтересованы в воспитании детей с учетом их гендерных особенностей, то они могут с успехом решить эти задачи.